

# Йыр сафта ҡала

*Бөйөк Ватан һуғышында ун өс башҡорт яҙыусыһы ил азатлығы өсөн үҙ ғүмерен ҡорбан итә, уларҙың исеме мәңгелеккә халыҡ күңелендә ҡала. “Ватандаш” уҡыусыларына уларҙың ҡайһы берҙәренең шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ. Был шиғырҙар үҙҙәренең барлыҡ көстәрен Бөйөк Еңеү көнөн яҡынайтыуға бирҙеләр. Уларҙың һәр бер әҫәре үҙ осорҙары тураһында, үҙҙәренең йәшлектәре, хыялдары, ынтылыштары тураһында ине. Шиғырҙары үҙ заманында яҡташтарыбыҙҙы хеҙмәткә һәм көрәшкә рухландырҙы. Уларҙың йырҙары бөгөн дә сафта ҡала, халыҡ күңелендә лайыҡлы урын тота, кешеләрҙе уяу булырға саҡыра һәм тыныслыҡҡа өндәп тора.*

## Бәҙрүш Моҡамай (1909—1944)

Бәҙретдин Мөхәммәтйән улы Мөхәммәтйәнов (Бәҙрүш Моҡамай) 1909 йылда Башҡортостандың Дүртөйлө районы Ҡайыш ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Өфөгә килеп, педагогия техникумына уҡырға инә. 1931 йылда, техникумдан һуң, Шишмә районына уҡытыусы булып эшкә китә. Аҙаҡ ул, бер ни тиклем ваҡыт Өфөлә “Йәш коммунар” газетаһында эшләгәс, 1933 йылда Дүртөйлөгә ҡайтып, “Ярыш” исемле район газетаһында әҙәби хеҙмәткәр булып урынлаша. 1933—1936 йылдарҙа Совет Армияһында хеҙмәт итеп ҡайтҡас та ошо газета редакцияһында эшләй. 1936 йылда Б.Моҡамай Коммунистар партияһы сафына инә һәм ошо уҡ йылды Яҙыусылар союзы ағзалығына кандидат итеп алына.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, ул фронтҡа китә, Мәскәү янындағы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша, Вязьма, Можайск, Великие Луки ҡалаларын дошмандан азат итеү һуғыштарында була; фронтта ике тапҡыр яралана. 1944 йылдың 20 сентябрендә Латвияны азат итеү өсөн барған алыштарҙа Б.Моҡамай батырҙарса һәләк була.

### Атака алдынан

Соҡорҙарға, уйһыу урындарға,
Йылғаларға аҡ томан ята.
Сулпан ҡалҡа, һыҙылып ал таң ата,
Ә таң менән — беҙҙең атака.
Өҫтөбөҙгә уттар яуғанда ла,
Алған ерҙе ташлап китмәҫкә,
Ун мәртәбә тәнгә яра алып,
Ҡандар аҡҡанда ла — сикмәҫкә.
Һәр беребеҙҙең күңеле шулай уйлай,
Шул хис менән ҡайнай ҡаныбыҙ.
Беҙ беләбеҙ:
Үҙебеҙ үлгәндә лә,
Мәңгелеккә ҡалыр даныбыҙ.

## Атаканан һуң

Балҡып, көлөп, ҡыҙарып ҡояш сыҡты,
Алтын нурға күмеп ҡырҙарҙы.
Йылға өҫтөнә ятҡан аҡ томан да
Күтәрелеп аҡты, юғалды.

Беҙ ауылға индек. Һәр беребеҙҙә
Ҡояш кеүек көләс, яҡты йөҙ.
Бандиттарҙың үлек кәүҙәләре
Ерҙә ята — мең дә алты йөҙ.

Кисә генә ауыл төрмә ине,
Бөгөн уның күге өҫтөндә
Күтәрелде яҡты бәхет ҡояшы,
Иркен һулыш алды кешеләр.

## Данлы еңеү менән ҡайтырмын

Бик күп йөрөнөм, оҙон юлдар үттем,
Тауға мендем, тауҙан төштөм мин.
Төрлө яҡтың һауаһын һуланым мин,
Төрлө йылға һыуын эстем мин.

Бөтә ере йәмле ватанымдың
Бөтә урыны йәнгә яғымлы...
Ә шулай ҙа үҙем тыуып-үҫкән
Ағиҙелкәй буйын һағындым.

Ағиҙелем...
Тирә-яғы уның зәңгәр урман,
Шаулап үҫә унда ҡамыштар.
Үҫә уның иркен ҡырҙарында,
Тулҡынланып, бойҙай, арыштар.

Сәскә ата унда алмағастар,
Бешә унда татлы емештәр.
Йәшәй унда минең йән һөйгәнем,
Йәшәй унда минең дуҫ-иштәр.

Йәшәй унда минең ике балам,
Йыуанысы булып күңелдең...
Бик һөйәм мин Ағиҙелкәй буйын,
Бик һөйәм мин Урал — илемде.

Был һөйөүем минең йөрәгемде
Күрә алмаусылыҡҡа өйрәтте.
Был һөйөүем минең
Дошмандарға
Нәфрәтемдең утын дөрләтте.
Нәфрәт менән,
Ярһыулы асыу менән
Дошманымды ҡанға батырҙым.
Көт һин мине, гүзәл Ағиҙелкәй,
Данлы еңеү менән ҡайтырмын.

1943

## Төхфәт Морат (1906—1944)

Төхфәт Фәттәхетдин улы Моратов 1906 йылда Башҡортостандың хәҙерге Йылайыр районы Ишембәт ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Тыуған ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, 1922 йыл Темәс фабрика-завод училищеһына уҡырға инә. 1924—1927 йылдарҙа Ырымбур башҡорт педагогия техникумында уҡый. 1927 йылда Өфөгә килеп, “Башкнига” нәшриәтендә редактор булып эшкә урынлаша. “Сәсән” журналы редакцияһында эшләй. 1936 йылда педагогик эшкә күсә: Хәйбулла районының мәғариф бүлегендә инспектор, Аҡъяр урта мәктәбендә туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы булып эшләй.

1942 йылдың 2 апрелендә ул армияға алына һәм, ҡыҫҡа сроклы хәрби күнегеүҙәр үткәндән һуң, май айында фронтҡа ебәрелә. Ике тапҡыр ҡаты яралана. 1944 йыл фронтта Коммунистар партияһы сафына инә. Һуғыш ҡырында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградалана. 1944 йылдың 24 декабрендә Латвия ерендә һәләк була.

### Хуш бул

Гудок.
Паровоздың гудогына
Яңғырап ҡуйҙы Алкин
урманы,
“Хуш бул!
Еңеү алып ҡайт!” тигәндәй,
Аҡ ҡайындар яулыҡ болғаны.
Хуш бул!
Хуш бул, Башҡортостан!
Һине
Артыҡ һөйгән өсөн
Ҡалдырам.
Эйе, беҙ ҡайтырбыҙ
Тиңһеҙ шатлыҡ,
Еңеү алып,
Бөйөк дан менән.
Мин ант иттем
Киң ҡояшлы илем
Һәм азатлыҡ һөйгән халҡыма.
Ышан, илем,
Ышан, халҡым, миңә
Хыянатым булмаҫ антыма!
Шаһит булһын ҡояш,
Шаһит булһын
Әсәйемдең биргән аҡ һөтө.
Ҡабат әйтәм,
Минең бурысым булыр
Саф антымды һөттәй аҡ итеү.
Ҡерләй алмаҫ дошман күкрәгемде
Ниндәй юлдар менән килеп тә,
Сер ала алмаҫ дошман ҡурҡытып та,
Йылан булып, эскә инеп тә.
Һәр ҡарашын
һәр бер хәрәкәтен,
Һәр тауышын уның танырмын.
Дошманыма булған асыуымды
Йомшарта алмаҫ ялыныу.
Бөйөк партиямдың саҡырыуы
Һәр бер аҙымымда үтәлер,
Һәр аҙымым минең алға барыр,
Уның исемен бөйөк күтәреп.
Поезд бара.
Бөйөк гимн булып
Антым тора минең алдымда.
Хуш бул! Хуш бул,
Башҡортостан!
Һине
Антым өсөн бөгөн ҡалдырам.

1942

## Ватан өсөн

Ватан!
Ошо бер һүҙ ҡаныбыҙға
Әсә һөтө менән һеңешкән.
Ғәҙәтләндек әйтеп
Ватан һүҙен
Әсә һүҙе менән йәнәштән.
Йотом һауаһы ла был Ватандың,
Бер ус тупрағы ла был ерҙең,
Туҙаны ла,
әсе әреме лә
Беҙҙең өсөн бик-бик ҡәҙерле.
— Ватан өсөн! — тибеҙ,
ғәйрәтләнеп,
Тиңһеҙ атакаға барғанда.

— Ватан өсөн! — тип
ҡабатлай комбат,
Орудиенан ут асҡанда.
— Ватан өсөн! —
Ауыр снарядтар
Дошман окоптарын ҡуптара.
— Ватан өсөн! —
Танкылар, катюшалар,
Самолеттар алға уҡтала.
— Ватан өсөн! —
ошо һүҙ яңғырай
Канонадаларға ҡушылып.
Яңғырай ул беҙгә
ҡеүәт биреп,
Ә дошманға — үлем, үс булып.

## Дуҫ ҡәбере янында

Хуш бул, дуҫҡай,
ҡәбереңә, бәлки,
Һуңғы тапҡыр килеп торамдыр.
Ишетәһеңме,
позициялар буйлап,
— Һөжүмгә! — тип сигнал уйналды.
Был сигнал,
ҡаты оран булып,
Үс алырға беҙҙе саҡыра.
Ғәфү ит, дуҫ,
оҙаҡ тора алмайым,
Тағы атакаға ашығам.
Һәм ғәфү ит, дуҫҡай,
ҡәбереңде
Сәскә менән биҙәп торманыҡ.

Һәйкәл өсөн баш осоңа тағы
Йондоҙ-фәлән яһап ҡуйманыҡ.
Үҙ окобың — һинең ҡәбереӊ булды,
Һәм һин — һалдат — уны
аңларһың:
Хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең үпкәләргә
Ҡаты яҙмышына һалдаттың.
Башыбыҙҙы эйҙек окобыңа,
Бер минутҡа ғына теҙләнеп.
Үс алырға өнһөҙ анттар бирҙек,
Автоматты ҡыҫып, тешләнеп.
Залп бирмәнек,
һиңә тигән залптар
Дошман йөрәгенә атылыр.
Һеҙ ҡорбандар өсөн
иң ҙур һәйкәл —
Еңеү тигән һәйкәл һалыныр.

## Ғайса Йосопов (1905—1941)

*Ғайса Ғәлиәкбәр улы Йосопов 1905 йылда Башҡортостандың Мәләүез районы Дәүләтҡол ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ун биш йәшендә Стәрлетамаҡ балалар йортона барып урынлаша. Ошо уҡ йылда уны Алыҫ Көнсығышҡа ебәрәләр. Унда Ғайса Йосопов бер аҙ ваҡыт шырпы фабрикаһында эшләй, оҙаҡламай тыуған яҡтарына ҡайта. 1923 йылда Өфөгә килеп, Ленин мәктәбенә уҡырға инә. Өфө рабфагын 1930 йылда тамамлап, Ленинградҡа хәрби медицина академияһына уҡырға китә. 1932 йылда ул Коммунистар партияһына ҡабул ителә. 1934 йылда Академияны тамамлағас, хәрби врач булып хеҙмәт итә, аҡ финдарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ул госпиталдә врач булып эшләй. 1941 йылдың авгусында, фашист самолеттары госпиталде бомбаға тотҡан саҡта, Ғ.Йосопов һәләк була.*

## Һөйөклө Урал

Ал таҫмаһын һуҙып таң атҡанда,
Урал шаулай, Урал йылмая,
Тәрән шахталарҙың ҡосағында
Эш донъяһы ҡайнай, йәнләнә.
Текә ҡаяларҙы һөйөп үтә
Гудок тауышы, йөрәк тултырып,
Ҡөслө динамиттар таш онтайҙар,
Алтын эҙләп, осҡон уйнатып.
Һәр көн һайын, меңәр тонналап,
Баҡыр, суйын, күмер тапшыра,
Һуңғы көндә тағы йомартланды,
Нефть биреү өсөн ашыға.
Индустрия тормош тергеҙгәндә
Урал белде йылдар теләген,
Урал, Ҡавказ, Донбасс, Баку —
СССР-ҙың индустрия йөрәге.
Тыуыр йылдар Урал күкрәгенән
Йәнә тәрән тишеп төшөрҙәр.
Ҡилер йылдар,ҡарт Уралдың
Һаҡлап килгән серен сисерҙәр.
Күңелле лә шундай бай Уралды
Буйһондороу
Техниканың һуңғы көсөнә,
Баҡыр сыбыҡтарҙан йөк йүгертеп,
Машинаны егеү эшенә.
Күкһелләнеп ятҡан Урал тауы
Алыҫ йәйгән йәшел ҡанатын,
Елһеҙ көндәрҙә лә шау-шыу унда,
Тулҡынлана матур хаяты.
Таҙа беләклеләр бысҡы тарта,
Таҡта ярыла, таҡта тунала.
Һәр көн һайын унда, шатлыҡ сәсеп,
Үҫеш музыкаһы уйнала.
Беҙҙең йылдар Урал күкрәгенән
Суйын юлдар һуҙып китәләр,
Ауыр тәгәрмәстәр, йөк күтәреп
Шул юлдарҙан йырлап үтәләр.
Һөйкөмлө лә Урал, урманлы ла,
Байлыҡ та күп уның ҡулында.
Шатлыҡ та ул беҙҙең, таяныс та,
Күкрәгендә гигант ҡорғанда.
Бөҙрә урман кеүек, уйҙар ҡуйыра,
Уйҙар ҡуйыра, уйҙар тулайҙар,
Сөнки дәүер оҙон юлға сыҡҡан,
Данлы йылдар пропеллер ролен
уйнайҙар.

## Яҙ тураһында

Ер төрөнгән
ҡалын ҡатламдарҙа
Күрә алмаҫһың
Был йылғылай
яҙҙың килгәнен.
Ер ҡартайған,
Ә беҙ йәшәртәбеҙ,
Ҡөсәйтәбеҙ йөрәге тибеүен.
Бөгөн тамсы тамды,
Яҙ тамсыһы тамды тупылдап,
Һалҡын ҡыштың
һалҡын ап-аҡ ҡары
Быуға әйләнә
ҡояш нурында.
Август айы килер,
таң елендә
Тулҡынланһын тиһәң арыштар,
Эй, колхозсы,
ашла ҡырҙарыңды,
ундай ҡырҙа
Байлыҡ, табыш бар.
Тау битенән аҡҡан ҡар һыуынан
Ташҡын тыуа,
көслө шарлауыҡ,
Яҙ килеүгә колхоз эшендә
Беҙ ҡайнаныҡ,
һәм беҙ шауланыҡ.
Тамсы артынан
тамған тамсы һымаҡ,
Йөрәгемдән уйҙар тамдылар.
Май айының эшсән ҡырҙарына,
Ал яулығын болғап,
таң тыуыр.
Иртүк тороп йәштәр
йоҡоһонан
Триерҙе эшкә ектеләр,
Триерҙән тыуған тауыштар
Яҙ шатлығын һөйләп үттеләр.
Вәли ағай һәләк уйсан кеше,
Таҙа бойҙай
услап алды ла
Шатлығынан йөҙөн йылмайтты,

Ә бойҙайҙар бармаҡ араһынан
Тамсы төҫлө
ергә тамдылар.
— Вәт был бойҙай!
Ундай орлоҡто
Күргәнем юҡ һис тә, ғүмер ҙә,
Был триер ниндәй һәйбәт нәмә,
Шатландыра, —
тине, — күңелде.
Яҙ уңышы өсөн триерҙе
Эшкә ҡушып кемдер ҡыуана;
Эшкә аяҡ салған ялҡауҙарҙы
Ударниктар эштән ҡыуалар.

Алһыу нурын һибеп,
май ҡояшы
Баҫыуҙарға нурын ташланы.
Ал иренен һуҙып ерҙе үпһә,
Беҙҙең ҡырҙа эштәр башланыр.
Алтын,
көмөш,
баҡыр табылғандай,
Дан күтәргән данлы Уралда
Алтын төҫлө
таҙа бойҙай сәскәс,
Алтын төҫлө бойҙай урырҙар.

1930

## Мәлих Харис (1915—1944)

*Мәлих Харис (Мәлих Харис улы Харисов) 1915 йылда Башҡортостандың Саҡмағош районының Яңы Күл ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Бик йәшләй етем тороп ҡала, байтаҡ йылдар ауыл кулактарында көтөү көтә. Башланғыс белемен үҙҙәренең ауылында ала. 1941 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай. Шул уҡ йылда хәрби хеҙмәткә алынып, офицерҙар курсында уҡып сыға. 1944 йылда Ватан һуғышында батырҙарса һәләк була.*

### Һағынам

Шиғри бер кис,
Офоҡ ситтәрендә
Һыҙылып тора тауҙар, урмандар,
Йоҡлай улар,тәмле төштәр күреп,
Төрөнөп йәйге йомшаҡ томанға.
Һәм тулған ай менә күк йөҙөнә,
Йондоҙ төркөмдәре ҡабына,
Шундай кистәрҙә мин ҡабатланмаҫ
Көндәрҙе һәм һине һағынам.
Күҙ алдымда һинең йәнле шәүләң,
Әйтерһең дә, нурҙан яралған.
Толомдарың, тулҡын-тулҡын булып,
Билдәреңә төшөп таралған.
Күҙҙәрең ул һаман — зәңгәр күлдәр,
Керпектәрең — күлдәр ҡамышы.
Тын төндәрҙә аҡҡан шишмәләрҙе
Хәтерләтә һинең тауышың.

Ишетәм һинең еңел аҙымыңды,
Күҙҙәреңдең тәрән ҡарашын...
Күрәм,
Һиҙәм ҡайнар һулышыңды,
Ҡулдарыңды — аҡҡош ҡанатын.
Һәм кинәт мин тағы яңғыҙ ҡалам,
Хыял томандары тарала.
Таң алдынан һүнгән йондоҙ кеүек,
Һинең еңел шәүләң юғала.
Тик зәңгәрһыу күктәр уртаһына
Ғәмһеҙ генә тулған ай менә,
Һәм баҡсала, миңә әкиәт һөйләп,
Усаҡ япраҡтары һелкенә.
Мин ултырам алмай күҙҙәремде
Алыҫтағы тауҙар яғынан.
Шундай кистәрҙә мин ҡабатланмаҫ
Йылдарҙы һәм һине һағынам.

## Батыр тураһында баллада

Ул йығылды...
Дошмандарға утлы асыу менән
Янды уның тынмаҫ йөрәге.
Ул торорға тағы теләне,
Тик яңынан кипкән ирендәре
Тейҙе таңғы еүеш үләнгә;
Күренмәгән бер көс алып китте
Киң бушлыҡҡа,
                    төпкә, тәрәнгә.
Ишетмәне яҡын дуҫтарының
Еңеү менән алға барыуын,
Шатлыҡтарҙың фашист йөрәгенә
Ҡаты үлем хөкөмө яҙыуын.
Ул үҙе лә шулай көслө ине,
Ҡайнар көрәш уның аңында,
Һәм ҡәһәрле дошман мәйеттәре
Өйөлөп ята тирә-яғында.
Яуыздарға хурлыҡ,
                    ер ерәнә
Күтәрергә бысраҡ тәндәрен.
Батырға дан:
                    йыртҡыс күкрәгендә
Һынды уның ҡорос хәнйәре!
Ул йығылды. Уны ауырыу иҙә,
Ул ыңғыраша тәрән яранан.
Йыйып ерҙән томан пәрҙәләрен,
Һалҡынса ел иҫә даланан.
Шулай ятты батыр ҡанлы ҡырҙа,
Күктә аҡты ҡурғаш болоттар,

Тиңдәш ине хатта быуаттарға
Үткәндәрен, йыраҡ киләсәген
Бергә йыйған был ҙур минуттар.
Ә йыраҡта изге тупрағына
Ҡолдар йәше тамды һаман да,
Сал ҡарт бары рус булғаны өсөн
Һуңғы һулыш алды тағанда,
Һәм таштарға тамды ғәйепһеҙ ҡан,
Саҡырып ғәҙел үсте алырға,
Асыу итеп бөтә үлемдәргә
Алға, һаман алға барырға.
Йәш һуғышсы, йыйып барлыҡ көсөн,
Тағы асты талған керпеген.
Хәтерләтте уның күҙ ҡарашы
Үткер күҙле тауҙар бөркөтөн.
Тамырҙарҙа гүйә ут йүгерҙе,
Йәш йөрәге янды, елкенде.
Баҫты ергә мәғрур имән кеүек,
Әкиәттәге титан шикелле,
Һәм атланы алға,
Ул бәхетле:
Ул буйһонмаҫ, — Рус ерендә
«Үс! Үс!» тигән һүҙҙәр таныш телдә
Сыңлап торҙо ҡолаҡ төбөндә;
Ә өҙөлгән ҡулдан,
Күкрәгенән
Үләндәргә тамды ҡайнар ҡан,
Шулай тыуа ергә ҙур мөхәббәт.
Шулай тыуа еңеү, тормош, дан.

## Хат

Беләм, әсәй, беләм, ауыр һиңә;
Борсолоулы уйҙар — иптәшең.
Ҡарап минең киткән юлдарыма,
Күптән, күптән һағынып көтәһең.
Йыйырсыҡтар сәғәт, минут һайын
Тәрәнәйгән кеүек йөҙөңдә.
Ләкин бел һин:
Бөгөн иртә таңда
Һуғыш барҙы һинең өсөн дә;

Һәм әле лә көслө канонада...
Саҡыра һуғыш: һау бул хәҙергә,
Мин йығылһам әгәр, йәш түкмә һин,
Ә тын ғына шулай хәтерлә:
«Ул Ватанын һөйҙө, ут эсендә
Уның данын, намыҫын яуланы,
Ул йығылды, ләкин башҡаларға —
Ғүмер бирҙе. Юҡҡа ауманы».

## Онотмаһын мине тыуған ил

Яралынан аҡҡан ҡан кеүек,
Таң ҡыҙара офоҡ ситендә.
Һөжүм үтте. Тынлыҡ. Ял итә
Бәрелеш ҡыры туҙан, төтөндә.
Ләкин берәү таңды күрмәне:
Ул йәш егет Урал буйынан.
Ҡосҡан кеүек бала әсәһен,
Ҡалҡыу ерҙе ҡосоп йығылған.

Һәм бөҫланып аҡҡан ҡайнар ҡан —
Һуңғы бүләк һөйгән еренә,
Айырыла алмай, изге тупраҡты
Үбә кеүек һаман ирендәр.
Эй, ғүмерҙең һуңғы сәғәте,
Һин миңә лә шулай күкрәп кил.
Батырҙарын иҫкә алғанда,
Онотмаһын мине лә Тыуған ил.

## Мазһар Абдуллин (1912—1942)

Мазһар Ғиләжетдин улы Абдуллин 1912 йылда Башҡортостандың Салауат районы Беренсе Иҙелбай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Тыуған ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, 1924 йылда Өфөләге Ленин мәктәбендә уҡый. 1930—1933 йылдарҙа Мәскәүҙә журналистарҙың Коммунистик институтында уҡый. 1935—1937 йылдарҙа Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. Ул бер нисә йыл Башҡортостан китап нәшриәтендә редактор, «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә культура һәм әҙәбиәт бүлеге мөдире булып эшләй.

Һуғыш башланыу менән, М.Абдуллин армияға алына, танкистар мәктәбен тамамлағас, Мәскәү янындағы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. М.Абдуллин 1942 йылдың 25 авгусында Калинин өлкәһендә Воригино ауылы эргәһендәге һуғыштарҙа батырҙарса һәләк була.

## Ҡышҡы кис

Ҡышҡы кис. Күк аҡһыл зәңгәр,
Уйнай ҡар бурандары.
Тәрән тынлыҡҡа күмелгән
Ауылдың урамдары.

Яр башындағы бер өйҙә
Шәм нурҙары емелдәй,
Яҡты шәм янында бер ҡыҙ
Йырлай-йырлай йөн иләй.

Орсоғо бик шәп әйләнә,
Ашыға ул, ашыға.
Һуғыштағы боецтарға
Йылы бүләк һалырға.

Уларға ҙур еңеү теләп,
Күкрәге иркен һулай.
Орсоғона күҙҙәренең
Нурҙарын ҡушып урай.

Тик уларға йүнәлткән ул
Иң йылы тойғоларын,
Күңеленән һөйөп ҡотлай
Иленең батырҙарын.

1941

## Ватан

Ватан!
Һәр бер кеше һине яҡлау өсөн
Күтәрелде изге көрәшкә,
Миллион күңелдәргә яҡын исем —
Ватан исеме беҙҙең йөрәктә.

Тыуған илдең намыҫын һаҡлауҙан да
Артыҡ бәхет бармы донъяла?
Ватан — әсә. Уның йәшәүе өсөн
Ҡыҙғанмайбыҙ ҡайнар ҡанды ла!

## Сабир Ҡинйәкәй (1919—1945)

Сабир Мөьмин улы Ҡинйәкәйев 1919 йылда Башҡортостандың Көйөргәҙе районы Түбәнге Мотал ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул кесе йәштән ук бик зирәк була, хатта мәктәпкә йөрөй башлағансы уҡырға-яҙырға өйрәнә. Үҙ ауылдарында башланғыс белемде алғандан һуң, С.Ҡинйәкәй 1933 йылда күрше Яҡуп ауылындағы крәҫтиән йәштәре мәктәбендә уҡый башлай. Шул йылда ВЛКСМ сафына инә. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, 1936—1938 йылдарҙа Өфөлә медицина рабфагында, унан һуң педагогия институтында уҡый. Ләкин уға институтты тамамларға тура килмәй, 1939 йылдан Көйөргәҙе районының “Ленин байрағы” гәзитендә редактор урынбаҫары булып эшләй башлай.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, С.Ҡинйәкәй 1942 йылдың 7 ғинуарында илебеҙҙе һаҡларға китә һәм фронтта Коммунистар партияһына ҡабул ителә. Һуғыш бөтөргә бер нисә генә көн ҡалғас, Балканда фашистарҙың һуңғы өйөрҙәрен юҡ итеү өсөн барған ҡаты көрәштәрҙә 1945 йылдың майында Сабир Ҡинйәкәй батырҙарса һәләк була.

### Халҡым йырлай

Кеше түгел инек бит беҙ
Октябргәсә,
Оҙата ине мең ғазап
Тар ҡәбергәсә.

Күҙ йәш, хәсрәт менән атты
Һәр бер таңыбыҙ,
Кеше тупһаһында кипте
Ҡайнар ҡаныбыҙ.

Баяр ерҙәрен һуғарҙыҡ
Ҡайнар тир менән,
Беҙ йәшәнек баярҙарҙың,
Этенән түбән.

Ҡара, йәмһеҙ ине донъя,
Тар ине киң ер.
Нурһыҙ, һыуыҡ күк аҫтында
Һыҡранды ҙур ил.

Өмөтһөҙ ине барыр юл,
Юҡ ине шатлыҡ,
Һәр ерҙә лә алдау ине,
Юҡ ине хаҡлыҡ.

Ишетһәк тә ишетмәнек,
Хаҡһыҙ инек беҙ,
Белһәк тә белмәнек,
Хаҡһыҙ инек беҙ.

Күрһәк тә күрмәнек,
Хаҡһыҙ инек беҙ.
Тел ҡуҙғатып һөйләмәнек,
Хаҡһыҙ инек беҙ.

Тик Октябрь һипте беҙгә
Шатлыҡлы нурын
Һәм күрһәтте таңдан яҡты,
Бәхетле юлын.

Бөтмәҫ шатлыҡ, дәрт ҡабыҙҙы
Һәр бер күңелгә,
Ватан, һауа, ер бирҙе
Беҙгә мәңгегә.

Ҡороп кипкән күп ҡырҙарҙа
Гөлдәр үҫтерҙе,
Хәйерселек, ауырлыҡты...
Барын бөтөрҙө.

Шуға ла шул Октябрҙе
Сикһеҙ һөйәбеҙ,
Һәр бер көндө еңеүҙәргә
Биҙәп киләбеҙ.

## Йәшә, илкәйем

Яҡты иртәнән
Яҡты илкәйем,
Гөл баҡсаһындай,
Йәмле еркәйем.

Һәр саҡ хуш еҫле
Саф, таҙа һауа.
Һулышым иркен,
Рәхәт тын алам.

Матур йәшәүҙә
Шат, көләс халҡым,
Бары ла, дуҫтым,
Йөрәккә яҡын!

Һөйөп үҫтергән
Шат Ватанымды,
Бәхетем, иркем
Һәм дә данымды

Мәңге мәңгегә
Батыр һаҡлармын.
Илем алдында
Антым аҡлармын!

## Хөсәйен Ҡунаҡбаев (1912—1943)

Шағир Хөсәйен Әхмәтйән улы Ҡунаҡбаев (Хөсәйен Ҡунаҡбай) 1912 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Әбйәлил районы Таһир ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Бик йәшләй етем ҡалыуы сәбәпле, ауыл кулактарында көтөүсе булып йөрөй. Унан һуң балалар йортонда тәрбиәләнә. 1925—1929 йылдарҙа Баймаҡ районы Темәс ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Бер аҙ ваҡыт Бөрйән районында волисполком секретары, Иҫке Монасип ауылы мәктәбе мөдире һәм уҡытыусы булып эшләй.

1930 йылда Х.Ҡунаҡбаев Өфөгә килә һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзите редакцияһына эшкә урынлаша. Күп тә үтмәй, радиокомитетҡа бүлек мөдире итеп күсерелә. 1932 йылда ул Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инә һәм «Коммуна» гәзитендә бүлек мөдире булып эшләүе менән бер үк ваҡытта башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеген уңышлы тамамлап сыға.

1936 йылда ул Дәүләкән педучилищеһына рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп эшкә ебәрелә, ә бер йылдан һуң Мәғариф министрлығы уны Стәрлетамаҡ педучилищеһына рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп тәғәйенләй. 1940—1942 йылдарҙа ул Стәрлебаш районының Табылды ете йыллыҡ мәктәбендә уҡытыусы, директор булып эшләй.

1942 йылда ул үҙе теләп фронтҡа китә, ысын патриот, коммунист рота политругы Хөсәйен Ҡунаҡбаев ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. 1943 йылдың февраль айында Курск өлкәһендәге Н.Оскол районы Ольховатка ауылы өсөн барған һуғышта ул батырҙарса һәләк була.

## Хат

Хатым һиңә һағыныу йырҙарымды
Һаҡлап алып барһын...
Йөрәгемдә һиҙәмен мин
Таныш түгел ярһыу.
Алыҫ, ят ҡырҙарҙың тупраҡтарын,
Һағыш ҡырҙарының шау-шыуын
Ҡисеп үткәс, бәлки, тынысланыр,
Бәлки, баҫылыр йөрәк ярһыуы...
Мин ҡайтырмын өйгә, уйнағанда
Тауҙар түбәһендә таң еле,
Яҙҙар еткәс, үҙе тыуған күлде
Һағынып ҡайтҡан аҡҡош шикелле.

## Йәшлек дуҫыма

Йылдар үткәс, тағы осраштыҡ беҙ.
Тағы күрҙем һине
Һәм эҙләнем һиндә, ашҡынып,
Үҙ йәшлегемде мин.
Һәр бер бите, хатта бер юлы,
Уйҙарымдай, таныш китаптың
Эстәлеге кеүек, күҙҙәреңдә...
Ҡайтмаҫ йәшлегемде мин таптым.
Алыҫ йылдар,
алһыу йәшлек таңым,
Һағынһаң да инде ул ҡайтмаҫ.

Ә беҙ —
Күп нәмәнең тиңһеҙ ҡиммәтен
Төшөнәбеҙ, уны юғалтҡас.
Дөрөҫ,
ҡыҫҡа ғүмер эсендә
Мин аҙ күрҙем һөйөнөс,
Һәм дә ике бөйөк нәмәне
Сиктән тыш һөйҙөм:
Уның береһе, —
ғүмерем кеүек, йәп-йәш
Тыуған илем минең,
Икенсеһе — йөрәгемдәй яҡын
Йәшлек дуҫым ине.

## Мөхәмәтйәров Хәй (1911—1941)

М.Хәй (Хәй Ғабдрафиҡ улы Мөхәмәтйәров) 1911 йылдың 15 сентябрендә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡунаҡбай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Һигеҙ йәшенән етем ҡалғас, ул ағаһы тәрбиәһендә үҫә. Башланғыс белемде үҙ тыуған ауылы мәктәбендә алғандан һуң, ул 1924 йылда, Өфөгә килеп, Ленин исемендәге урта мәктәпкә уҡырға инә. 1928 йылда был мәктәпте тамамлағас, Силәбе өлкәһенең Арғаяш кантонында пионерҙар эше менән етәкселек итә. Ә 1931 йылда ул комсомолдың Башҡортостан өлкә комитеты тарафынан Өфөгә матбуғат эшенә саҡырыла. Ул «Ленинсы», «Йәш коммунар» гәзиттәрендә бер нисә йыл редактор, редактор урынбаҫары булып эшләй, ВЛКСМ-дың Өлкә комитетында яуаплы эштәр башҡара. 1933—1937 йылдарҙа М.Хәй Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. Институтты тамамлағандан һуң, Мәскәүҙә тәржемәселәр һәм редакторҙарҙың бер йыллыҡ курсын үтә.

Хәй 1940 йылда, Ҡыҙыл Армия сафына киткәнгәсә, Өфө Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, ул фронтҡа китә һәм 1941 йылдың декабрь айында Ҡөньяҡ фронтта батырҙарса һәләк була.

## Ватан

Минең Ватаным
Океандарҙан киң,
Гүзәллектә ул —
Сәскәләргә тиң.

Минең илемдә
Ҡояш та яҡты,
Йондоҙҙар ҙа шат,
Ерҙә бик яҡшы.

Минең илемдең
Күге лә бик киң,
Мин үҙ илемдә
Ҡояштай ирекле.

Элек был ерҙә
Хәсрәттәр тыуҙы,
Күҙ йәше менән
Беҙ ерҙе йыуҙыҡ.

Халҡымдың ҡаны
Йылғалап аҡты,
Бөтә ғүмерҙе
Ҡайғы оҙатты.

Зарға бай булдыҡ.
Бәхет күрмәнек.
Шатлыҡ ни була —
Уны белмәнек.

Күк тә бит былай
Киң түгел ине.
Ерҙә ҙур төрмә,
Буш күңел ине.

Асыҡ йондоҙҙар,
Ҡүл һәм урмандар
Хәсрәт, ҡайғыға
Тулған булғандар.

Яңы ҙур ҡояш
Яҡтыртты көндө,
Һәм яңы ҙур ай
Яҡтыртты төндө.

Мәңгегә яңы,
Мәңге-мәңге шат,
Мәңгегә матур,
Мәңге-мәңге саф —

Ул минең халҡым,
Ул минең ерҙәр,
Йәшел урмандар,
Хәтфәле ҡырҙар.

Күл, йылғаларым
Һыу менән тулы,
Һәм диңгеҙҙәрем
Зәңгәр тулҡынлы.

Ер аҫтым — хазина,
Тауҙарым бейек,
Торалар күкһел
Болотҡа тейеп.

Мәңге-мәңге йәш
Ул минең халҡым,
Ҡүҙҙәре — йондоҙ,
Йөрәге — алтын.

Халҡым күңеле
Пак, саф шишмәләй,
Халҡым ғүмере
Шиңмәҫ сәскәләй.

Егеттәре — ыласын,
Һылыу — ҡыҙҙарым,
Балалар — гөлдәр,
Бик йәш — ҡарттарым.

Минең бишекте
Тирбәткән ерем,
Бар матурлыҡты
Күрһәткән илем.

Бөтә донъяның
Ҙур байрағы һин,
Бөтә ҡолдарҙың
Күҙ алмаһы һин.

Ер бәхете һин,
Ер сафлығы һин
Ер тормошо һин,
Ер шатлығы һин.

Мин һине бирмәм,
Бирмәм һис кемгә.
Һинһеҙ тормош юҡ,
Йәшәү юҡ беҙгә.

Һин — минең ғүмер,
Ялҡынлы теләк,
Шәфҡәтле әсә
Һәм туҙмаҫ йөрәк.

Мең-мең мөхәббәт,
Рәхмәт, ил, һиңә.
Иң ҙур бәхетем,
Ватаным, һиңә.

Мин ни менән бай,
Мин барын бирәм
Һинең хаҡына —
Тыуған илгенәм.

Йөрәк ҡанымдың
Ал иң яҡшыһын,
Күҙ нурҙарымдың
Ал иң яҡтыһын.

Күҙҙе һаҡлаған
Күҙ ҡабығындай,
Беҙ торабыҙ, ил,
Һинең һағыңда.

Мәңге йәшә һин,
Тыуған илгенәм,
Балҡы һин, ҡояш,
Яҡтыр, көнгөнәм.

Шатланһын халҡым,
Йәшәрһен ҡырҙар,
Шаулаһын тормош,
Яңраһын йырҙар.

Мин һине, илем,
Бирмәм һис кемгә.
Һинһеҙ тормош юҡ,
Йәшәү юҡ беҙгә.